Һәүәләй филиалының «Бәләкәс» Олокүл  ауылының  балалар баҡсаһы

# Тема: «Башҡорт  халыҡ уйындары» (проект эше)

Башҡарҙы: мәтәпкәсә  төркөм тәрбиәсеһе Хисаметдинова Ләйсән  Сәит  ҡыҙы

Һәүәләй – 2022 йыл.

Башҡорттарҙа бер әйтем бар:

**«Уйын – тормоштоң башы» .**



Маҡсат:

1)“Башҡорт халыҡ балалар уйындары” темаһын өйрәнеү, халыҡ уйындарының сюжетлы  һәм хәрәкәтле төркөмдәргә бүленешен аңлатыу, уйындар темаһына ҡағылышлы, һүҙҙәрҙең, һүҙбәйләнештәрҙең актив һүҙлек составына инеүен булдырыу;

2) Балаларҙы башҡортса әүҙем аралашыуға ылыҡтырыу, фекерләү ҡеәүһен, телмәр күнекмәләрен, хәтерҙәрен үҫтереү; сослоҡ, таҫыллыҡ, йылдамлыҡ, иғтибарлыҡ сифаттарын тәрбиәләү;  һөйләү күнекмәләрен камиллаштырыу.

3) Башҡорт теленә һөйөү һәм ҡыҙыҡһыныу, балаларға башҡорт халҡының милли уйындарын өйрәтеү; үҙ милләтенә һөйөү тәрбиәләү; балаларҙа милли мәҙәниәттен тәү сығанағын өйрәнеүгә нигеҙ булдырыу, бер-береһенә ихтирам, иғтибар, ярҙамсыллыҡ тәр биәләү.

Белем биреүсе: балаларҙа милли мәҙәниәт  тәү  сығанағын өйрәнеүгә нигеҙ булдырыу; уйындарына ҡыҙыҡһыныу уятыу.

Фәнни- ғәмәли эҙләнеү эшенең актуаллеге

Һуңғы йылдарҙа һәр бер йортта интернет селтәре барлыҡҡа килеү менән балалар компьютерға йомолдолар. Өйҙән сыҡмай ғына виртуаль уйындарҙы хуп күреүселәр артҡандан - арта бара.

Ата- әсәләр ҙә әллә ваҡыт юҡлыҡҡа һылтанып, әллә урам буйында йөрөүгә ҡарағанда өйҙә ултырыуҙы һәйбәтерәк күреп, балаларының уйындарына бик иғтибар бирмәйҙәр. Шуның менән уларҙың һаулығына ниндәй зыян килеүен уйламайҙар.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хәҙерге ваҡытта балалар араһында элек-электән йәшәп килгән халыҡ уйындары онотола бара. Ә халыҡ уйындары беҙҙең иң ҡиммәтле мираҫтарыбыҙҙың береһе бит! Беҙҙең төп маҡсат- балаларҙа хәрәкәт талап иткән уйындарҙың файҙаһы тураһында аңлатма эше алып барыу. Һәм, әлбиттә, уларҙы компьютерҙан айырып урам буйына алып сығыу.

Баланың телмәрен үҫтереү өсөн “Төлкө менән айыу”, “Эт үҙенә нисек хужа тапҡан?” , “Айыу менән бал ҡорттары” тигән башҡорт халыҡ әкиәттәрен, “Шалҡан”, “Тирмәкәй”, “Ҡыҙыл башлыҡ” рус халыҡ әкиәттәрен уҡыныҡ, аҙаҡ уларҙың эстәлеген һөйләргә, йә уларҙың йөкмәткеһе буйынса әңгемәләштек. Был саҡта баланың әкиәт геройҙарына ҡарата булған мөнәсәбәттәрен белергә һәм уларҙы бергәләп һабалау мөмкинселеге тыуа.

Әкиәттәрҙән ҡыҫҡа ғына өҙөктәрҙе ролдәргә бүлеп, сәхнәлештереп бергәләп уйнарға була. Әкиәттәр баланы фекерләүен, хәтерен, бәйләнешле телмәрен үҫтерә, кешелеклек сифаттары тәрбиәләгә ярҙам итә. Әкиәттәргә иллюстрация эшләп, һүрәтенә аңлатма бирһә, тағы ла отошлораҡ.

Балаларҙың телмәре үҫешенә “Кул ҡурсаҡтары” менән төрлө әңгәмәләр, диалогтар ҡороу ҙа бик отошло алымдарҙың береһе. Ҡурсаҡтар менән бала ихлас аралаша, телмәрен байыта.


СКАЗКИ
Золушка
Колобок
Гуси-лебеди
Курочка Ряба





Башҡорт уйыны «Бүре менән ҡуяндар»
(«Волк и  зайцы») мәктәпкәсә әҙерлек төркөмө.



Башҡорт уйыны «Йәшрәм яулығымды”(«Прячу платок») мәктәпкәсә әҙерлек төркөмө.



Башҡорт уйыны «Тирмә» («Юрта») мәктәпкәсә әҙерлек төркөмө.



Башҡорт уйыны «Аҡ тирәк, күк тирәк» («Белый тополь, синий тополь») мәктәпкәсә әҙерлек төркөмө.

# Йомғаҡлау

Шулай итеп, балаларҙың бәйләнешле телмәрен үҫтереү тәрбиәселәрҙең дә, ата – әсәләрҙең дә төп бурысы булып тора. Мәктәпкә барғанда бала бөтә өндәрҙелә дөрөҫ  әйтеп, һөйләмдәрҙе дөрөҫ төҙөп, үҙенең  уй - фекерен эҙмә - эҙлекле, йөкмәткеле һәм бәйләнешле итеп, ҡаушамайынса  һөйләй белһен өсөн, беҙ, өлкәндәр барыһын да эшләргә тейешбеҙ. Уйындар ярҙамында телмәре үҫешкән, халыҡ йолаларын белгән, тарихҡа, тыуған телгә ихтирам тәрбиәләгән балаға тормошта үҙ урынын табыу ауыр булмаҫ.

Иғтибарығыҙ өсөн ҙур рәхмәт!